*Фәниә СӨЛӘЙМӘНОВА*

# Геройҙың тере һынын тағы күргәндәй булдым

## Алтын йондоҙло ауылдашым



*Сайранов Саҙиҡ Уйылдан улы*

Советтар Союзы Геройы Саҙиҡ Уйылдан улы Сайранов ауылдашым булһа ла (Йомағужа районының Һыртлан ауылында тыуған), уны бары бала сағымда ғына, унда ла яҙа-йоҙа бер генә тапҡыр күреп ҡалдым. Минең, әле мәктәп ишеген асып инергә лә өлгөрмәгән ҡыҙыҡайҙың, хәтеренә ул ҡалын ҡашлы, үткер, әммә һөйкөмлө ҡарашлы ир уҙаманы булып уйылды. Яурынындағы ялт-йолт итеп торған һары погонында ике йондоҙ балҡый, билен яҫы ҡайыш менән һыға быуған. Шуныһын да онотмағанмын: өр-яңы гимнастеркаһына уңлы-һуллы тағылған орден-миҙалдарынан тыш, балҡып торған һап-һары миҙал һәм уның менән йәнәш Ленин бабай төшөрөлгәне бүтәндәренән айырылыбыраҡ тора ине (аҙаҡ ҡына белдем, һап-һары тигәнем — алтын миҙал, Ленинлыһы орден булған икән). Ул ағайҙы күреү менән мин үҙемсә уй төйнәй һалғайным: “Атайым менән ауылдан бер мәлдә киткәс, һуғышта ла, моғайын, бергә булғандарҙыр. Атайым ниңә тороп ҡалды икән? Уны ҡасан ҡайтаралар? Һорайым әле Саҙиҡ ағайҙан”. Тик, геройҙы күрергә тип, халыҡ күп йыйылғанлыҡтан, минең ише ыбыр-сыбырға уның янына барырлыҡ түгел ине. “Ярар, аулаҡтараҡ күрермен әле”, — тип үҙемде йыуатып торорға тура килде. Әммә ундай форсат сыҡманы. Ни өсөн тигәндә, герой ағай ауылда күренмәҫ булды. Аҙаҡ белеүемсә, Саҙиҡ ағай Ишембайға киткән дә йәшәргә шунда ҡалған икән...

## Ҡара төндә яҡты ут атҡыһы

Йылдар үтте. Ул Ишембай тигәненә әленән-әле юлым төшөп торҙо. Ауылдаш ағайҙы күреп, атайым хаҡында бала сағымда әҙерләгән һорауҙарымды ла биргем килә. Әммә йәшлек бәләһе: уның янына барырға тартынам... Бер саҡ, баҙнатһыҙлығымды еңеп: “Ишембайға тағы юл төшһә, Саҙиҡ ағайҙы мотлаҡ эҙләп табасаҡмын”, — тип үтә ҡәтғи ҡарарға килеүен килдем. Тик осрашырға өлгөрмәнем, Саҙиҡ ағайҙың баҡыйлыҡҡа күсеүен ишеттем. Ишеттем дә икенсе тапҡыр атайымды юғалтҡандай булдым. Ҡара ҡағыҙы килһә лә, атайым берәй саҡ ҡайтып төшөр кеүек тойола ине. Ә Саҙиҡ ағай ҡайтмаҫ юлға сыҡҡан... Осрашыу хаҡында йылдар буйы һаҡлаған хыялдарым бөтөнләй һүнде... Шулай ауыр уйҙар уртаһында ҡалған сағымда, гүйә, дөм ҡара төндә бер ут атҡыһын күрҙем. Бәй, шатлығын да, ҡайғыһын да ағай менән бергә кисергән еңгәй иҫән дә баһа. Исмаһам, уны күреп булһа ла, ниңә ағай тураһындағы иҫтәлектәрен тыңламаҫҡа?

## Серле төргәк

Ишембайға сираттағы сәфәрем ваҡытында туп-тура Сайрановтар фатирына юл тоттом. Бәхетемә күрә, еңгәй, Сәрүәр Фәйзрахман ҡыҙы Сайранова, өйҙә булып сыҡты.

Һөйләшеп ултыра торғас:

— Саҙиҡ ағай иҫән ваҡытта уҡ һеҙгә әллә нисә тапҡыр килергә ниәтләнһәм дә, инеп сығырға форсат тапманым, атайымды һорашырмын, һуғышта башынан үткәндәрен яҙып алырмын, тип уйлағайным, — тиеүемә Сәрүәр Фәйзрахман ҡыҙы:

— Байгилде ағайҙы ул йыш телгә ала торғайны. Һөйләгәне һуғышҡа тиклемге дәүергә ҡағыла ине. Уны яу ҡырында күрмәгәндер, — тине лә алдыма бер төргәк килтереп һалды.

— Был ниндәй серле төргәк ул? — тип аптырап киттем.

— Ағайыңдың архивы, — тине еңгәй һәм Саҙиҡ ағайҙың Ватан һуғышына тиклемге тормошо хаҡында һөйләп алды.

Ауылдашым тәүҙә Алыҫ Көнсығышта Халхин-гол янында япондар менән һуғышҡан. Япондарға ҡаршы һуғышта алған тәжрибәһен нисек оҫта ҡулланыуы хаҡында бәйән итеп, еңгәй уның Белоруссиялағы ҡаһарманлығын хәтеренә төшөрҙө:

— Хәйер, иҫән сағында ағайың был турала хәтирәһен яҙып ҡуйғайны. Бына был төргәктә шул яҙмаһын һаҡлайым, — тип “архив”ты асып ҡарарға рөхсәт итте.

## Башҡорт егетенең Белоруссиялағы ҡаһарманлығы

Бына ул яҙма. Мин уны һүҙмә-һүҙ килтерәм: “Был хәл Белоруссияла булды. Неман йылғаһы. Ул — Көнсығыш Пруссияға табан барыусы юлды быуып тороусы берҙән-бер ҙур тәбиғи ҡаршылыҡ. Беҙҙең рота фашистарҙың йылға аша сығыу ниәтенән ныҡлы әҙерлек алып барған урынына яҡынлаша. Һаҡ ҡына барабыҙ. Алдыбыҙҙа бик үк бейек булмаған тау пәйҙә булды. Уның түбәһенән Неман асыҡ ҡына күренде. Аръяҡта, беҙҙең ҡаршыла ғына — хутор. Тирә-яҡ тып-тын. Был яҡ ярҙа — кәмә. Әммә яр буйы күренмәй. Уны тау ышыҡлай. Ротаны ҡалдырып, дозорныйҙар менән бергә тауҙың түбәһенә тиклем шыуыштым. Ни күрәм — немецтар! Бер... ике... Юҡ, өс роталай бар. Хутор тулы немец. Бөтә ҡоралдарын ташлап, һал бәйләйҙәр. Танкылары, орудиелары — өй ышығында. Уларҙы һалам менән ҡаплағандар. Ҡул пулеметтарын таған итеп һөйәгәндәр, автоматтары — арҡаларында.

— Беҙҙе көтмәгәндәр.

— Дошман тиҙерәк йылға аша сығырға самалай.

— Ҡасып ҡотолмаҡ була!

Шулай тиештек тә, ротаға боролоп, күргәнебеҙҙе һөйләп бирҙем. Тиҙ генә донесение яҙа һалып, связнойҙы полк командирына оҙаттым.

Нишләргә? Бер генә рота менән өс ротаға ҡаршы тороп булырмы? Булырға тейеш! Улар беҙҙекеләрҙе был яҡтан көтмәй. Форсатты файҙаланып ҡалырға кәрәк.

Полк командиры Титовтан разведка яһарға, артабан урындағы хәлгә ҡарап, алға барырға бойороҡ алынды. Тик был дуғаны һындырғансы бөгөү менән бер булмаҫмы? Хәйер, уйға батып, икеләнеп торорға форсат юҡ. Взвод командирҙарын йыйып алдым. Улар менән һөйләшкәндән һуң:

— Ҡисеү тәңгәленән һөжүм итергә! — тип приказ бирҙем.

Рота шым ғына аҫҡа, уйһыуыраҡ урынға төштө. Ағастар араһынан боҫа-боҫа хуторға яҡын уҡ килеп еттек. Килеп еттек тә:

— Ура! Ура-а! — тип ҡысҡыра-ҡысҡыра немецтар өҫтөнә ябырылдыҡ. Йөҙгә-йөҙ килеп, прикладтар селпәрәмә килгәнсе алыш китте. Баҡсаға ҡасҡан, һыуға һикергән фашистарҙы ҡырып бөткәнсе һуғышты гвардеецтар.

Хутор өсөн һуғыш ни бары егерме минут барҙы. Тиңһеҙ алышта ҡандары ҡыҙған яугирҙарымды туҡтатып алыр әмәл юҡ.

— Артабан нишләргә? — тип бер урында сыҙап торалмайҙар. Уларҙың рухының күтәренкелеген иҫәпкә алып:

— Рота! Алға! Неманды аша сығырға! — тип фарман биреүем булды, взводтар бер-бер артлы йылғаға төшөп тә китте. Немецтар әҙерләгән һал да, бүрәнәләр ҙә, таҡталар ҙа эшкә ярап ҡалды. Ҡем кәшмәк, һалға өлгөрмәгән, тегеһенә лә, быныһына ла йәбешеп, батмау сараһын тапты. Воропаев тигән Себер егете, ҡайҙандыр шифоньер табып алып, шуға ултырып йөҙә. Һалдаттар көлә:

— Эй, эй, Степа, арт һаныңдан һыу инмәйме? — тип шаярталар.

— Ҡөлмә! Үҙеңдеке еүешләнмәһен!

Шундай юҡ ҡына нәмә лә уларҙың күңелен күтәреүе мине лә шатландыра.

Уйын-көлкө күпкә барманы. Ни өсөн тиһәң, ҡаршы яҡ ярҙан йәҙрәләр һыҙғырыша, һалдаттарым эргәһенә төшкән снарядтар тулҡын уйната башланы.

Артҡа ҡарайым — полк күренмәй. Ҡире уйларға мөмкин түгел. Алға, тик алға ғына.

Неман һиңә Ағиҙел түгел. Ағышы шәп. Беҙ бар хәлебеҙсә йөҙәбеҙ.

Шул саҡ әллә ҡайҙан немец самолеттары килеп сыҡты. Ҡилеп тә сыҡтылар, бомба һелтәй ҙә башланылар. Бер бомба минең кәшмәккә килеп төшөүе булды, мин әллә ҡайҙа осоп барып төштөм. Барып та төштөм, һыу төбөнә китеп тә барҙым. Аяҡты тибеп ебәреп, ҡалҡып сығам да тағы батам... Билдәге ике граната, арҡалағы автомат, эсенә һыу тулған итек — бөтәһе лә Әжәл яғына тарта... Шуларҙан әкренләп ҡотолдом да бата-сума йөҙөп киттем. Әлдә тыуған ауылым — Һыртланым Ағиҙел ярында ғына. Малай саҡта тиңдәштәр менән ярыша-ярыша йөҙөүҙәрҙән алған күнекмәм ярҙам итте. Арғы ярға имен-аман барып етелде. Аяҡ аҫтында ҡоро ер икәнен тойғас ҡына, бер үлемдән ҡотолоуыма ышандым.

Үлемдән ҡотолдом тип, үҙең менән мауығырға форсат юҡ. Ярҙан да, хутор яғынан да немец туҡтауһыҙ ата. Баш осонан ғына свастикалы ҡоҙғондар ҡыйылып үтеп тора. Шыуышып барып, яр аҫтына ышыҡландым. Ҡараһам, ротам яр буйына һибелгән. Мине күргәс, атыша-атыша эргәмә йыйылдылар.

Хуторҙан атыусы фашистар баш ҡалҡытырға ла бирмәй. Тирә-яҡты байҡап, уныһын-быныһын самалап алдыҡ та, ҡыуаҡтар араһынан хуторҙы урап үтеп, фашистарҙың тылына барып индек.

Итек һыу төбөндә ҡалды бит инде. Аяҡта ойоҡбаш ҡына. Башта ла бер ни юҡ. Өҫ-баш туҙған. Шул килеш йөрөп ятыла. Ҡырсынташ, ҡомлоҡтан ойоҡсан йүгереп барышлай команда бирәм:

— Рота, алға! Минең арттан!

Ярһыған гвардеецтарҙың батырлығы немцтарҙы сигенергә мәжбүр итте.

Беҙ ҡалдырып киткән ярға шул арала полк килеп етте. Ҡөслө ут аҫтында Неманды сыға башланы...”

Яугирҙың хәтирәһе ошо урында өҙөлгән. Уны яҙырға һуңлап тотонғанға оҡшай. Юҡһа был операцияның үҙе өсөн, хәйер, үҙе өсөн генә түгел, тотош халҡыбыҙ өсөн мөһим һөҙөмтәһен, Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булыуын да кинәнеп яҙыр ине. Ҡем белә, бәлки, был хаҡта яҙырға баҫалҡылығы форсат бирмәгәндер... Хәтирәнең дауамы юҡ. “Эх, үҙе иҫән саҡта килеп, хәтирәһен тулыһынса яҙып

алырға ине лә бит", — тип мин тағы ла үкенесле уйҙарға бирелдем...

"Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына", — ти торғайны олатайым. Сайрановтар фатирында ултырғанымда ошо мәҡәлдә хаҡлыҡ барына тағы бер инандым. Берҙән, Саҙиҡ ағай үҙе булмаһа ла, уның хәтирәһе менән танышыу бәхетенә ирештем. Икенсенән, шул хәтирәләр өҙөлгән мәлдә тыуған "Ниндәй шарттарҙа Герой исеменә лайыҡ булды икән?" тигән һорауыма яуап булырҙай мәғлүмәткә юлыҡтым. Геройҙың архивынан төҫлө открытка килеп сыҡты. Унда герой билдәләрен таҡҡан Саҙиҡ ағай һынландырылған ине. Мин күргәндәге ҡабарып торған сәс, ҡуйы ҡаштар, йөҙөнә һөйкөмлөлөк өҫтәп торған теремек ҡара күҙҙәр... Открытканың һыртында ҡыҫҡа ғына текст бирелгән. Ә унда былай тип яҙылған (төбө-тамыры менән сей башҡортто икенсе милләт вәкиле тип таныштырған тәүге һөйләмгә объективлыҡ хаҡына төҙәтмә индереп, текстың ҡалған өлөшөн тулыһынса төп нөсхәләгесә бирәм): "Герой Советского Союза САДЫҠ УИЛДАНОВИЧ САЙРАНОВ, 1917 года рождения, башкир из деревни Сыртлан Юмагузинского (ныне Мелеузовский. — ***Ф.С.***) района Республики Башкортостан. Ҡомандир стрелкового взвода.

При форсировании реки Неман взвод гвардии лейтенанта Сайранова первым на подручных средствах переправился на западный берег реки. На бревне им удалось переправить два станковых пулемета и боеприпасы к ним. Противник превосходящими силами перешел в контратаку, но был отброшен. Это дало возможность всему батальону переправиться на западный берег реки. Стянув резервы, фашисты возобновили атаку. Сайранов, возглавив стрелковую роту вместо раненого командира роты, смелым и решительным маневром зашел противнику в тыл и стремительно атаковал его. В результате атаки, с тыла и с фронта гитлеровцы были разбиты.

Смелыми и решительными действиями коммунист Сайранов обеспечил переправу батальона, удержание и расширение плацдарма. Указом Президиума Верховного Совета С.У.Сайранову присвоено звание Героя Советского Союза" (Художник С.Яковлев. "Изобразительное искусство"). Хәтирә буйынса, командалыҡ итеүҙе Сайранов үҙ өҫтөнә алған рота — тотош полктың, открытка тексы буйынса, батальондың Неманды аша сығыуын тәьмин иткән. Улайға китһә, открытканы әҙерләүселәр өсөн башҡорт ни ҙә, татар ни. Советтар Союзы Геройы тигән маҡтаулы һәм данлы исем алған кешенең милләтен бутағас, батальон менән полкты бутауҙары ла бик мөмкин. Взвод командиры дәрәжәһендәге ауылдашым, хәрби антына тоғро ҡалып, юғары командование ҡуйған фарманды батырҙарса еренә еткереп үтәгән.

## Һандуғасмы ни!

...Берсә ҡаһарман ауылдашымдың хәтирәләрен ҡат-ҡат байҡайым, берсә открыткала әйтелгәндәрҙе яңынан күҙҙән кисерәм.

Алыҫ бала сағымда хәтеремдә уйылып ҡалған бер мәл иҫемә төшә, ул алдымда сабыр ғына үҙенең иҫтәлектәрен бәйән итеп ултырған Сәрүәр Фәйзрахман ҡыҙы менән бәйле. Шуға ла ул хәтирәләрҙе уның менән бүлешергә булдым.

— Сәрүәр апай, бала сағымдан бер хәтирә минең күңелгә ғүмерлеккә инеп ҡалған. Был — ысын артист тауышын тәүгә ишетеүем ине. Миңә ул саҡта алты йәштәр самаһы булғандыр. Йәйге кис... Беҙҙең яр башы урамында дүрт-биш өй аша ғына Мәхиән бабайымдарҙа мәжлес бара. Асыҡ тәҙрәнән ағылған моңло йырҙы ишетеп, шул йорт тәңгәленә халыҡ йыйылып киткән. Бала-саға ла шунда уралана. Беҙ ҙә йыр тыңлайбыҙ. Ара-тирә ҡолағыма ололар ауыҙынан сыҡҡан шундай һүҙҙәр ишетелеп ҡала:

— Беҙҙең Саҙиҡ немецты ҡаты туҡмаған, ти...

— Геройлыҡты бушҡа биреп тормайҙар инде...

— Алып ҡайтҡан кәләшен күрһәгеҙ! Уның матурлығы! Торғаны кино экранынан төшкән әртискә!

— Әнә нисегерәк йырлай! Беҙҙең Аралдағы һандуғасмы ни!

Оҙаҡламай ауылда шундай күренеш күҙәтелә башланы. Берәй ерҙә — һыу алыштамы, урамдамы, магазиндамы — бер нисә кеше йыйылдымы, шул тирәлә ураланған бала-саға "Герой Саҙиҡ", "Әртис Сәрүәр" тигәнде йыш ишетер булды.

Бына ошоларҙы яҙа-йоҙа, томан артындағы һымаҡ ҡына итеп булһа ла, хәтеремдә һаҡлап ҡалғанмын.

— Эйе, туғаным, — тине Сәрүәр апайым, мин әйткәнде хуплағандай итеп, — ул көндәр бик ныҡ хәтерҙә ҡалған. Саҙиҡтың туған-тыумасаһы бик яҡшы ҡаршыланы беҙҙе. Заманына күрә мул ғына табын ҡороп, өйҙән-өйгә йөрөтөп ҡунаҡ иттеләр, — тине лә апай, минең үтенесем буйынса, үҙенең ғүмер юлының Саҙиҡ ағай менән бергә үткән өлөшөн хәтерләүгә төшөп китте.

## Героик никах

Үткән быуаттың 30-сы йылдары башланып ҡына торған мәлдә Йомағужа районының Теләүембәт тигән ауылында бер һылыу ҡыҙ артистка булыу хаҡында хыяллана башлай. Тәүәккәл дә була үҙе. Мәктәпте тамамлау менән, ата-әсәһенең ризалығын алыуға өлгәшкән шул ҡыҙ, театраль училищеға инеү маҡсаты менән Өфөгә юл тота. Ул Сәрүәр Фәррәхова була. Тәүәккәллегенең ярҙамы тейә. Ҡыҙыҡайҙы техникумға алалар. Унда уҡыу йылдарын йылы хәтирә итеп телгә алып, Сәрүәр апай:

— Педагогтарымдан уңдым. Үҙ һөнәренә мөкиббән бирелгән кешеләр — Бохарский, Абдулла Шакиров кеүек данлыҡлы шәхестәр ине улар. Уҡыуҙы тамамлағас, Академтеатрҙа ҡалдырҙылар. Островскийҙың "Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр" драмаһы буйынса ҡуйылған диплом спектаклендә Крушкина ролен уйнаным. Театрға килгәс тә, шул ролде атҡарыу насип булды, — тине.

Сәхнә йондоҙҙары Булат Имашев, Ғиниәт Ушаков, Рим Сыртлановтар менән ижади хеҙмәттәшлек иткән дәүерен Сәрүәр апай һағынып телгә алды. Үкенескә ҡаршы, уға ятаҡан ижади эшенән тиҙ айырылырға тура килә. Алыҫ Белоруссияла хеҙмәт иткән егете уны Минскиға алып китә. Әммә ғаилә бәхетен оҙаҡ татырға тура килмәй. Һуғыш барыһына ла аяуһыҙ төҙәтмә индерә: ире ут эсенә инә, ҡатынға сабыйы менән иленә ҡайтып китергә тура килә.

Йомағужала уға район советында эш тәҡдим итәләр. Шул дәүерҙә Советтар Союзы Геройы исеме алып, ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа ауылға ҡайтҡан Саҙиҡ ағай уға ғашиҡ була.

— Оҙаҡламай мин Ишембайҙа йәшәй башланым, — тип һүҙен дауам итте Сәрүәр апай. — Бер ваҡыт мине телефонға саҡыралар. Йүгереп барып телефонды алһам — Саҙиҡ ағайыңдың тауышы. Йомағужанан шылтырата: "Мин иртәгә Ишембайға барып етәм", — ти. Минең иһә телем тотлоҡто ла ҡуйҙы... Икенсе көндө эштә ултырһам, килеп инде был. Килеп инеү менән:

— Әйттем — килдем, — тип ҡосаҡлап уҡ алды. — Ике балаңды яңғыҙың ғына үҫтерә алмаҫһың. Икәүләп үҫтерербеҙ, — тип, бергә йәшәргә өгөтләй ҙә башланы. Мин әйтәм:

— Бында инәйем менән бабайым бар. Һин тәүҙә уларҙың ризалығын ал.

Һыртландан күсеп килгән урыҫ танышы бар икән. Фатирға ул шунда китте. Мин инәйемә:

— Беҙгә бөгөн шундай-шундай йомош менән ҡунаҡ килергә тейеш. Һин нисек уйлайһың, инәй? — тим. Инәйем:

— Әйҙә-әйҙә, килһен, — ти. Шунан барынса әҙерләнгән булдыҡ. Ҡис менән эштән ҡайттым, шул арала Саҙиҡ ағайың да килеп керҙе. Балаларыма: “Атайығыҙ хәрби кеше”, — тип һөйләгәйнем. Ишектә офицер кейемендә ағайың күренгәйне, бәләкәй ҡыҙым:

— Ат-ай-й! — тип барҙы ла уны ҡосаҡланы. Ағайың бер ҙә аптырап торманы:

— Ҡайһылай ҙур ҡыҙым бар минең! — тип сабыйҙы күтәреп алды. Уныһы ике ҡулы менән ҡосаҡланы. Өлкәне тартынып тора ине, беҙ һөйләшә башлағайныҡ, әкрен генә шыла барып, шыла барып, ағайыңды ул да ҡосаҡлап алды. Шулай итеп, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, ололарҙан алда кескәйҙәр ризалыҡ бирҙе лә ҡуйҙылар... Саҙиҡтың шул саҡтағы йөҙөн күрһәң! Ҡояш кеүек балҡый ине. Ә күҙҙәре? Күҙҙәренә йәш эркелгәйне... Әйтерһең, яуҙан үҙ балаларын һағынып ҡайтҡан атай кеше уларҙы ҡулына алыуына сикһеҙ шатлана...

Табында ололар менән Саҙиҡ бик итәғәтле һөйләште. Ишембайға минең арҡала килгәнлеген аңлатты. Герой булараҡ, тиҙҙән фатир аласаҡ икән. Уныһын да әйтеп, эш тураһында ла һөйләп, пландары менән таныштырҙы. Уны оҙатып кереүемә инәйем:

— Бик тә яғымлы бала. Һәйбәт. Бер һүҙем дә юҡ. Әгәр үҙ-ара килешһәгеҙ, бергә торoғоҙ! — тине. Был уның беҙҙең ҡауышыуға фатиха биреүе ине. Шулай итеп, 1946 йылдың 23 февраленән алып бергә йәшәп алып киттек. Ике балам атайлы булды.

Эпос геройының ишләнеүен ғалимдар “героик никах” тип атай. Белмәйем, нимәне күҙ уңында тотоп шулай тиҙәрҙер. Әммә Советтар Союзы Геройы Саҙиҡ Сайрановтың атай һөйөүенән мәхрүм балаларға күңел йылыһын бүләк итеүе — үҙе героизм, минеңсә.

### Һүҙ ахыры

Сайрановтар, бергә-бергә һайрашып, утыҙ йыл ғүмер итә. “Һайрашып” һүҙе был осраҡта уларҙың татыу йәшәүенә лә ишара, тура мәғәнәһендә лә ҡулланылды.

— Саҙиҡ бик матур йырлай ине. Иң яратҡан йырҙары “Урал” менән “Буранбай” булды. Уларҙы зауыҡлы итеп, бөгөлдәрен ҡалдырмай, күкрәккә һалып йырлай торғайны. Был һәләт уға әсәһенән килгәндер. Уның әсәһенә, йәғни бейемемә, юҡҡа ғына “Йырсы Зөләйха” тигән ҡушамат таҡмағандарҙыр, моғайын...

Был һүҙҙәрҙе йыр сәнғәтенең ни икәнен яҡшы белгән белгес, Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Сәрүәр Фәйзрахман ҡыҙы Сайранова әйтә. Әгәр ҙә Сәрүәр апай шундай белгес булмаһа, Ишембайҙа ул ойошторған ижади түңәрәктәрҙән Хөсәйен Мәжитов, Шәмсиә Нагаева, Марат Солтанов, Тәнзилә Хисамова, Асия Смакова, Наил Тибеев, Римма Ниғмәтуллина һәм бик күптәр артабан сәнғәт юлын һайлап, танылған артист, сәнғәт эшмәкәрҙәре, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре булып китер инеме ни!

Сайрановтар икеһе лә тормошта үҙ урынын тапҡан, йәмғиәткә үҙҙәренең кәрәклеген яҡшы тойоп йәшәгән кешеләр ине. Үкенескә ҡаршы, беҙ әле һаман ундайҙарҙың ҡәҙерен белеп бөтмәйбеҙ, тейешенсә баһаларға өйрәнмәгәнбеҙ. Быға шул да миҫал: Саҙиҡ ағайҙың архивында Белоруссиянан килгән хаттар, ҡотлауҙар күп йыйылған, ә үҙ Башҡортостанынан, исмаһам, бер ауыҙ йылы һүҙ яҙылған ҡағыҙ киҫәге булһасы! Юҡ шул. Эсте бошорғос ошо хәлде “үҙ тиреһендә” яҡшы тойған Саҙиҡ Сайрановтың, үҙ-үҙенә урын тапмай, үрһәләнгән саҡтары әҙ булмаған. Бер саҡ ул хатта Ташкентҡа китә, әммә кире ҡайта. Әгәр ҙә етәксе органдар һәм йәмәғәтселек иғтибарлыраҡ һәм хәстәрлерәк булһа, теге саҡта итекһеҙ аяҡтарының ташҡа бәрелеп, ҡанһырауына ла ҡарамай, бер рота гвардеецты алға әйҙәп, дошмандың өс ротаһын тар-мар итерлек тактик алым ҡулланған геройыбыҙҙың ғүмере, иманым камил, оҙонораҡ булыр ине...